*Дамир* ***КУСКИЛДИН***

# Ҡинйәбулат ауылы XX быуатта

Ейәнсура районындағы был ауыл 1857 йылдан сотник Ҡинйәбулат Ҡаҙбулат улы Йомаҡаев исеме менән атала. Ә уға тиклем Ҡарағайтуғай утары тип йөрөтөлә. Хәҙер ҙә бәғзе берәүҙәр шулай тип атай. Районда яҙылған ҡайһы бер рәсми ҡағыҙҙарҙа ла шулай китә. Ул утар 1776 й. Урмансы ауылынан (хәҙер Ибрай) айырылып сыға. 10 йылдан 250 йыллығын байрам итергә була, әҙерләнә башларға ваҡыт етеп килә.

1901 й. сыҡҡан бер китапта 28 хужалыҡта 171 кеше көн иткәне күрһәтелә. 1926 й. 36 хужалыҡта 74 ир-ат һәм 89 ҡатын-ҡыҙ йәшәй.

1930 й. кантондар һәм волостар бөтөрөлөп, БАССР-ҙа 48 район төҙөлә. Шул йылда Ҡинйәбулат активистары партия күрһәтмәһе буйынса ауылда күмәк хужалыҡ төҙөй. Башта колхоз ауыл исемен йөрөтә. Бер нисә йылдан был исем район түрәләренә оҡшамай башлай, сөнки “иҙеүсе” синыфтарҙан булған кешенең исеме партия идеологияһына тап килмәй. Колхоз етәкселәренә, хужалыҡҡа партия, хөкүмәт әһелдәре исемен ҡушырға, тигән фарман әйтелә. 1935 йылдан Булашев исеме бирелә, ләкин 1937 й. октябрендә Башҡортостан хөкүмәте рәйесе З.Ғ.Булашевтың “халыҡ дошманы” булыуы “асыҡлана”. Тап ошо ваҡытта большевиктарҙың власҡа килеүенә 20 йыллыҡты киң билдәләргә йөрөйҙәр, һәм ноябрҙә райком бюроһы колхозға “Октябрҙең 20 йыллығы” исемен бирә. Оҙаҡламай хужалыҡ Сталин исемендәге колхозға ҡушылып, 4-се бригада булып йөрөй. 1961 йылдан — “Урал” колхозы.

1936 й. 5 декабре СССР Конституцияһы ҡабул ителә. Йыл һайын ул көндө байрам итә инек. Әммә ул конституция декларация, күҙ буяу өсөн генә кәрәк ине, демократия тигән нәмә ысынбарлыҡта булманы, партия, хөкүмәт етәкселәре төп законды үтәмәне.



Шул Төп законға нигеҙләнеп, 1937 й. июнендә БАССР Конституцияһы ҡабул ителде (ә хәҙер иһә беҙҙең республиканың Конституцияһы ла, республика үҙе лә юҡ булыу алдында).

1936 йылғы Конституцияға нигеҙләнеп, 1937 й. 12 декабрендә СССР Юғары Советына һайлауҙар үткәрелде. Һайлау уңышлы үтһен, халыҡ ризаһыҙлыҡ белдермәһен, власҡа ҡаршы сыҡмаһын өсөн шул йылда киң ҡолэмле репрессия ойошторола. Халыҡтың төрлө ҡатламынан, бигерәк тә етәксе урында эшләгәндәр, аҡыл хеҙмәтендәгеләр "ҡоротҡостар, милләтселәр, халыҡ дошманы" булып сыға, йәнәһе, һәм алданған халыҡ талабы буйынса атыла, лагерға оҙатыла, төрмәгә ябыла. Был — партия ойошторған террор, ҡурҡытыу сараһы ине.

Ноябрь айында һайлау комиссияларына "Октябрҙең 20 йыллығы" колхозынан Ҡинйәбулатов Ғәбиҙулла Хәлил улы һәм Абдрахманова Шәмсинур Сәләхетдин ҡыҙы күрһәтелә. Башҡортостандан 21 депутат һайлана. Шулар араһында беҙҙең районда сыҡҡан, 1938 йылдан БАССР Юғары Советы президиумы рәйесе Р.К.Ибраһимов.

1938 й. 26 июнендә РСФСР һәм БАССР Юғары Советтарына депутаттар һайлайҙар. Райондың "Ударсы" гәзите 10 майҙа Күгәрсен ауыл советы буйынса һайлау комиссияһы ағзаларының исемлеген бирә:

1. Ҡинйәбулатов Ғәбиҙулла Хәлилулла улы,
2. Ҡинйәбулатова Миникамал Хәмзә ҡыҙы,
3. Зарипов Ахунйән Ниғмәтулла улы,
4. Әбдулмәнов Ғимазетдин Сәләх улы,
5. Ҡәримова Нәзирә Әхмәтғәли ҡыҙы,
6. Ҡинйәғолова Ғәйниә Исхаҡ ҡыҙы,
7. Ҡолоев Әхмәҙулла Искәндәр улы,
8. Мозафаров Хәзизйән Әбхәлил улы,
9. Хәкимов Заһиҙулла Сабир улы.

1939 й. район һәм ауыл советтарын һайлайҙар. Халыҡ һайлауға байрам һымаҡ ҡарай. Күгәрсен ауыл советына 19 депутат һайланырға тейеш һәм 11 октябрҙә райкомдың бюро ултырышында 19 кандидат раҫлана. Шуларҙың алтыһы ҡатын-ҡыҙ — 31%, партияһыҙҙар 14 — 73%. Хәҙерге ваҡыттағы һымаҡ 10—15 кандидаттан бер депутат һайламағандар. 19 кандидаттың өсөһө Ҡинйәбулаттан. Өсөһө лә, әлбиттә, Ҡинйәбулатовтар:

1. Ғәбиҙулла Хәлилулла улы, 1905 йылғы, ауыл советы рәйесе,
2. Вәлетдин Илһаметдин улы, 1914 йылғы, колхозда иҫәпсе,
3. Миникамал Хәмзә ҡыҙы, 1917 йылғы.

Ауыл советына ингән ауылдар:

1. Ҡинйәбулат — 37 йортта 205 кеше,
2. Күгәрсен — 905 кеше,
3. Репьевка — 79 кеше,
4. Хоҙайбәндә — 267 кеше,
5. Богдановка — 376 кеше,
6. Малай Муйнаҡ — 123 кеше.

Бөтәһе 1949 кеше.

Һайлау комиссияларында Ҡинйәбулат ауылынан ҡатнашалар:

1. Тусалин (Дусалин булыуы дөрөҫ) Мырҙамөхәмәт Маһиян улы, 1889 йылғы,
2. Ҡинйәбулатов Вәлетдин Илһаметдин улы, 1913 йылғы,

3. Исхакова Сәмиғә Ибраһим ҡыҙы, 1914 йылғы,
4. Ҡинйәбулатов Ғәриф Искәндәр улы, 1907 йылғы,
5. Ҡинйәбулатов Абдулхаҡ Ибраһим улы, 1921 йылғы,
6. Ҡинйәбулатова Сәйҙә Шаһимарҙан ҡыҙы, 1916 йылғы,
7. Маликов Әғзәм Усман улы, 1905 йылғы.

“Сталинец” гәзите 24 декабрҙә үткән һайлау хаҡында яҙа: “До 6 часов утра оставалось еще более часа, а уже во всех домах села Кугарчи ярко горели огни. Народ спешил к зданию избирательного участка №7, чтобы отдать свои голоса лучшим людям района. Первым получил избирательный бюллетень 67-летний колхозник Халиков Хасан.

Жители деревень Кинзябулат, Богдановка, Худайбанда также проснулись рано. Люди спешат к избирательным урнам, чтобы выполнить свой гражданский долг. На улице молодежь поет песни, играет гармошка”, — тип яҙа гәзит һайлауҙан һуң биш көн үткәс.

20—30-сы йылдарҙа социализм төҙөгән совет кешеләренең тормош хәле батша заманына ҡарағанда күпкә ауыр ине. Халыҡтың иғтибарын донъяуи мәсьәләләрҙән ситкә йүнәлтеү өсөн партия синфи көрәште киҫкенләштерә, гәзиттәрҙә капитализмды хурлай, социализмды, совет демократияһын маҡтай, һәр төрлө “эске дошмандарҙы, милләтселәрҙе” эҙләп табып, уларға ҡаршы киң суд процесстары, репрессиялар ойоштора. Халыҡ тормош ауырлығына күнегә, алдауға ышана, дошмандар яуызлығы, ҡоротҡослоғо ғәйепле тип уйлай һәм уларҙы төрмәгә ябыуҙы, лагерҙа тотоуҙы, юҡ итеүҙе хуплай.

Ҡинйәбулат ауылы кешеләре күҙгә ташланып бармаған, ялыу-фәлән яҙмаған, эш менән мәшғүл булған. Архивтарҙа һаҡланған документтарҙа ауыл исеме һирәк осрай. Күрше ауылдарҙағы урыҫтар, татарҙар һәр төрлө сәбәп менән йә кантонға, йә волкомға, райкомға, прокурорға, Өфөгә һәм арыраҡ та даими рәүештә шикәйәт яҙа.

30-сы йылдарҙан архив документтарында ауыл, колхоз, таныш исем-шәрифтәр йышыраҡ осрай. Белемле кешеләр арта, районда гәзит сыға башлай, идара органдарына отчет яҙалар, партияның өгөт-нәсихәте, агитацияһы көсәйә. Ҡинйәбулатовтар, Маликовтар, Абдрахмановтар район үҙәгендә, ауыл советында, башҡа колхоздарҙа етәксе вазифаларҙы башҡара.

Ауылдың тәүге коммунисы, 1905 йылғы Ҡинйәбулатов Ғәбиҙулла Хәлилулла улы, документтарҙа Ғәбит Булашев исемендәге, 1937 йылдан “Октябрҙең 20 йыллығы” исемендәге колхоз рәйесе, Күгәрсен ауыл советы секретары, 1933 й. үҙ ауылында иҫәпсе, һуңынан колхоз рәйесе итеп үрләтелә, 1938 йылдан Сталин исемендәге колхоз рәйесе, һуңынан ауыл советы рәйесе вазифаларын башҡара.

Ҡинйәбулатов Вәлетдин Илһаметдин улы (1913—2004) ла шул уҡ юлды үтә, район үҙәгендә, башҡа колхоздарҙа ла эшләй.

Ҡинйәбулатов Әхмәтсафа Искәндәр улы, 1918 йылғы, Ватан һуғышында ҡатнаша, уға тиклем Ырымбурҙа Ҡаруанһарайҙа, Ҡуйбышевта хәрби мәктәптә уҡый, Иҫәнғолда РайОСО рәйесе, район комсомол ойошмаһын етәкләй, партия мәктәбендә уҡый, һуңынан райкомда бүлек мөдире.

Абдрахманов Сирай Нәбиулла улы, 1924 йылғы, Иҫәнғолда һуғыштан һуң ДОСАРМ рәйесе, райкомда инструктор, пропагандист, 1988 й. район тарихы буйынса китап-белешмә яҙа.

1936 й. райондағы коммунистарҙың документтарын тикшереү һәм алмаштырыу һөҙөмтәһендә 55 кеше (20%) партиянан сығарыла. Сәбәптәре:

— ойошманан ситләшкән, дезертирлыҡ эшләгән, икенсе урынға күскәндә учеттан төшмәгән;

— сығышы буйынса кулактарҙан, сауҙа итеүселәрҙән;

— енәйәт ҡылған, дәүләт, колхоз милкен сарыф иткән;

— аҡтарҙа хеҙмәт иткән, вәлидовсы, троцкист булған;

— коммунист исеменә тап төшөргән һ.б.

1937 йылдың февралендә кешеләрҙе мәктәпкә йыйып, митинг ойошторалар. Райондан килгән бер түрә троцкистарға ҡаршы йүнәлтелгән суд ҡарарын хуплап сығыш яһай. Ауыл кешеләре троцкистар Бухарин, Зиновьев кем икәнлеген аңлап етмәһәләр ҙә, шул “яуыздарҙы, халыҡ дошмандарын” атырға хөкүм итеүҙәре менән килешә. Бөтә ил килешә. Был репрессия ҡуласаһына яңы көс бирә.

Шул уҡ йылдың 17 сентябрендә “Правда” һәм “Известия” гәзиттәрендә Башҡортостан етәкселәренә ҡаршы “Кучка буржуазных националистов в Башкирии” һәм “Башкирские буржуазные националисты и их покровители” тигән мәҡәләләр баҫылып сыға. Йәнәһе, “председатель Совнаркома Башкирии Булашев группировал вокруг себя буржуазных националистов, насаждал их в аппарат наркоматов, долгие годы не давал разоблачать агентуру Валидова”. “Известия” гәзитендә: “В Совнаркоме председательствует Булашев — закадычный друг и собутыльник Тагирова (Афзал Таһиров халыҡ дошманы тип июнь айында ҡулға алына һәм 27 сентябрҙә Мәскәүҙә атып үлтерелә. — ***Д.К.***) и прочих буржуазных националистов. Это им, Булашевым, подписаны вредительские директивы, направленные на развал сельского хозяйства, промышленности и финансовых органов Башкирии”. 22, 24 сентябрҙә шул уҡ гәзиттәрҙә БАССР етәкселәре тағы ғәйепләнә.

Гәзиттәрҙәге шул мәҡәләләрҙе өйрәнеү һәм халыҡҡа аңлатыу тураһында райком бюроһы айырым ҡарар ҡабул итә.

4—6 октябрҙә ВКП(б) Үҙәк Комитеты секретары А.А.Жданов Өфөлә пленум үткәрә. Пленум күп партия һәм хөкүмәт етәкселәрен вазифаларынан бушата. 6 октябрҙә З.Ғ.Булашев ҡулға алына,1938 йылдың 10 июлендә атырға хөкүм ителә.

Ул пленум ултырышында райкомдың яуаплы секретары Ҡолмөхәмәтов ҡатнаша. Ҡайтып, 9 октябрҙә бюро йыя. Бюро ҡарар итә: “Решение Пленума об исключении из рядов ВКП(б) врагов народа, шпионов, буржуазных националистов, орудовавших в Башкирии во главе с секретарями Обкома Быкиным и Исанчуриным, полностью одобрить. Просить госорганы к этим бандитам, предателям родины применить самую жестокую расправу — уничтожить”.

15—16 октябрҙә район коммунистары тағы пленумға йыйыла. Ҡолмөхәмәтов оҙайлы доклад һөйләй. Сығыш яһаусылар күбеһенсә “Правда”, “Известия”, “Красная Башкирия” гәзиттәрендәге ялғанды ҡабатлай.

Комсомолдың райком секретары Һибәт Әмиров: “...халыҡ дошмандары булған милләтселәр комсомол ойошмаларына урынлашып, ҡоротҡослоҡ эше алып барҙы, бер нисә тапҡыр Вәлидов исемен күтәреп сыҡты, ләкин Быкин менән Иҫәнсурин хеҙмәтсәндәр ебәргән хәбәргә ҡолаҡ һалманы”, — тип һөйләп, етәкселәр алдында үҙ абруйын күтәрә. РайЗО мөдире Качан: “Группы пьяных колхозников поют контрреволюционные, антиколхозные, антисоветские час-

тушки, а председатели колхозов меры не принимают", — тип һөйләй һәм үҙ абруйын төшөрә.

Ҡинйәбулаттар шул замандағы бер таҡмаҡты хәҙер ҙә хәтерләй:

Ҡолхоз тараламы икән,
Совхоз ҡаҙаламы икән?
Урам тулы палнамушный,
Эттән яраламы икән?

Урыҫтар "где серп и молот, там мор и голод" тип рифмалайҙар.

Пленум аҙна элек үткән бюро ҡарарын ҡабатлай: "... по отношению к подлым врагам народа применить высшую меру наказания — расстрелять".

Пленум аҙағында беренсе секретарь итеп Ҡолмөхәмәтов һайлана, икенсе секретарь — В.Г.Сыуашаев, өсөнсө секретарь — И.Т.Надейчев. Берәү ҙә район кимәлендә "халыҡ дошманы" тип иғлан ителмәй. Был беренсе секретарҙың намыҫлы һәм ҡыйыу аҙымы була. Бының менән Өфөлә ултырғандар риза булыр ине, әммә улар Мәскәүгә ниндәй отчет бирер?!

1939 й. 27 майында Мәскәүҙә "О мерах охраны общественных земель колхозов от разбазаривания" тигән ҡарар ҡабул ителә. Шуға нигеҙләнеп, райондың 15 үлсәү комиссияһы 2—7 июлдә колхозсыларҙың 5506 га, колхозға инмәгән единоличник (был ғәйепләү, мәсхәрәләү һүҙе була) 97 хужалыҡтың һәм 616 колхоз ағзаһы булмаған ауыл интеллигенттарының (бынының ла ғәйепләү һүҙе) ишек алдын, баҡсаһын үлсәп сыға. 17 августа райисполком төбәктәге хужалыҡтар 722 гектар ерҙе законһыҙ биләгән, тип һығымта яһай.

Күгәрсен ауыл советына ингән "Октябрҙең 20 йыллығы", Сталин исемендәге, "Ҡыҙыл Ямашлы", "Герой Труда" колхоздарында һәр хужалыҡтың яҡынса ярты гектар самаһы ере булырға тейеш. Быға йорто, башҡа ҡаралты-ҡураһы урынлашҡан, картуф, йәшелсә ултыртҡан ере инә. Артыҡ ер бар икән, ул ер буш ятырға тейеш һәм берәүҙең дә уны ҡаҙып, тырмалап картуф сәсергә хаҡы юҡ, сөнки кеше байып китер, хәллерәк йәшәй башлар, ә бөтә кешеләр ҙә фәҡирлектә йәшәргә тейеш, ә фәҡирлек — революционлыҡ нигеҙе, тип иҫәпләй коммунизм идеологтары.

Ул саҡтарҙа әҙәм балаһының аяҡ-ҡулы бығаулы, хоҡуғы сикле ине. Көсө, һәләте булғандарға артыҡ эшләргә, тормошон яҡшыртып, балаларына аҙыҡты етерлек кимәлдә әҙерләргә мөмкинлек булманы. Ҡолхозсы күп ваҡытын үҙ хужалығында түгел, ә колхозда бушҡа эшләргә тейеш ине. Бындай иҡтисади сәйәсәт тәрән һөҙөмтә бирҙе — кеше, колхозға эшләп, матди яҡтан ҡыҙыҡһынманы, яуаплылыҡ тойманы, етештереү һәләте артманы. Районның 66 колхозында 6219 хужалыҡ иҫәпләнә, һәм кем артыҡ ер биләгән — ул тартып алына.

1939 й. декабрендә колхоз рәйесе итеп Вәлетдин Илһаметдин улы һайлана. Ғинуар айында ул райкомға отчет яҙа. Отчет буйынса, хөкүмәткә 270 ц иген тапшырылған, план — 267 ц; көнбағыш — 52 ц, план 50 ц; картуф буйынса ла план үтәлгән — 12,2 ц. Ссуданы ҡайтарыу һәм натуроплата 100% үтәлгән. Әммә орлоҡ һалыу — 40% ҡына.

Ҡолхозсылар 21850 хеҙмәт көнө эшләгән, бер хеҙмәт көнөнә 0,880 кг иген, аҡсалата 10 тин түләнгән. Эшкә һәләтлеләр 71 кеше, уларҙың 29-ы — ир-ат, 42 — ҡатын-ҡыҙҙар. Минимум хеҙмәт көнөн (80) 8 кеше үтәмәгән, бөтәһе лә ҡатын-ҡыҙҙар. Шуларҙың береһе ауырыу, күп балалылар — 5, сәбәпһеҙ — 2.

Һыйырҙар һаны план буйынса 36 баш булырға тейеш — был күрһәткес 30%-ҡа үтәлгән, һарыҡтар — 13%. Аттар — 70 баш, шуларҙың 42-һе йөк аттары, 24-е бейә, шуларҙан 11 бейә ҡолонларға тейеш, уртаса көрлөктәгеләре 26 баш, 8 баш ат — уртасанан түбән. Мал аҙығы әҙерләү 80%-ҡа үтәлгән, ҡатнаш аҙыҡ — 50%.

Сәскестәр — 3 дана, һабан — 8, тырма — 22, ҡамыт — 48, арба — 15, ҡапсыҡтар һаны — 60. Ҡар тотоу башҡарыла, тиреҫ сығарыла, көл һәм ҡош тиҙәге йыйыла. Ҡолхозда агроном юҡ, агроуҡыу ойошторолмаған. Баҫыусылыҡ бригадаһы — берәү, бригадир Маликов, 1937 йылдан эшләй. Ветфельдшер Ҡинйәбулатов 1937 йылдан алып эшләй. Ҡонюх — 1936 йылдан.

Ҡолхоз алдынғылары Абдрахманов Г.Х. сәсеүҙә норманы 140—150%-ҡа, тырмала Ҡаһарманов — 150%-ҡа, Ҡинйәбулатов Ғәрифулла сәсеүҙә һәм урожай йыйыуҙа нормаһын 160%-ҡа үтәй.

Ҡолхозда хата-лаборатория юҡ, 1940 йылға план да ҡаралмаған.

1941 й. ауылда берәр "Ҡыҙыл Башҡортостан" һәм "Красная Башкирия", 40 кеше райондың "Ҡоммунизм өсөн" һәм 10 кеше "Сталинец" гәзиттәрен алдыра.

Ҡешеләрҙең һөйләүе буйынса, һуғыш башланыу хәбәрен бесән әҙерләгәндә ишетәләр. Икенсе көнө, 23 июндә ауыл халҡын йыйылышҡа саҡыралар. 55 кеше ҡатнаша. Алыҫ Ҡөнсығышта һуғышта булған Ҡинйәбулатов Вәлетдин сығыш яһай. Ҡешеләр нәфрәтләнә, илебеҙҙең һуғышта еңеүенә ышана, әммә һуғыш оҙаҡҡа һуҙылыр, иҫ китерлек ауырлыҡтар, юғалтыуҙар, ҡайғы-хәсрәт кисерерҙәр, күптәр һуғышта һәм тылда һәләк булыр, тип уйламай.

Бер-ике көндән мобилизация башлана. Иң тәүҙә яңыраҡ армиянан ҡайтҡандарҙы һуғышҡа оҙаталар. 15 июлдә ауылдан ике кешене оргнабор буйынса тимер юлында эшләргә ебәрәләр. Исемдәре документтарҙа осрамаған тағы өс кешене төҙөлөшкә алып китәләр. Райондан 106 кеше 112-се атлы дивизияға оҙатыла. Ауылдан унда Ҡинйәбулатов Шакирулла һәм Абдрахманов Минһажетдин хеҙмәт итә. Район 65 кавалерия аты, 9 — артиллерия, 150 ылау аты, бөтәһе 224 ат әҙерләргә тейеш. Республика буйынса 3820 ат әҙерләнә.

Һәр төрлө һалым арта: хәрби, ауыл хужалығы, колхоздан, натуралата (ит, һөт, йомортҡа, йөн, тире), ат тотҡан өсөн һалым, культсбор, самообложение, страхование, хәрби заем, лотерея һ.б. Ул замандағы закондар ауыл кешеһенән күберәк аҙығын, барлы-юҡлы мөлкәтен тартып алыуға, бушҡа эшләтеүгә, колхоздарҙың һуңғы игенен һеперел алып китеүгә, партия ҡарарҙарын үтәй алмаған етәкселәрҙе юҡҡа сығарыуға ҡоролған. 1940 йылда ғына райондағы 36 тәүге партия ойошмалары секретарҙарының 13-ө алмашына. 16 ауыл советы рәйесенең — 7-һе, 66 колхоздың 30 рәйесе эшенән бушатыла.

1941 й. 26 ноябрендә ВКП(б) Өлкә комитеты бюроһы ҡарар сығара: "...За невыполнение плана сдачи хлеба государству в установленные сроки председатели райисполкомов и первые секретари райкомов ВКП(б) будут сняты с работы, исключены из членов партии и отданы под суд...

Для оказания помощи отстающим районам в выполнении плана хлебосдачи и обмолота урожая закрепить до окончания этих работ следующих руководящих работников Обкома и СНК БАССР за следующими районами:

22. Кугарчинский — Ибрагимов Р.К.

23. Зианчуринский...

24. Юмагузинский...”

1942 й. 1 июленә колхозда яуаплы вазифала (номенклатура хеҙмәткәрҙәре) ололар һәм ҡатын-ҡыҙҙар эшләй:

1. Ишмөхәмәтов Ғәлимйән Сәләхетдин улы, 1895 й., 1941 й. сентябренән 1942 й. майына тиклем колхоз рәйесе, белемһеҙ.

2. Ҡинйәбулатов Ғәләүетдин Сабит улы, 1886 й., аҙ белемле, 1941 йылдан ферма мөдире.

3. Баһауетдинова Гөльямал Шәйхетдин ҡыҙы, 1906 й., аҙ белемле, 1942 йылдан ҡошсолоҡ фермаһы мөдире.

4. Тусалин Бикмөхәмәт Маһиян улы, 1884 й., аҙ белемле, 1942 йылдан бригадир.

5. Ҡинйәбулатова Ғәлимә Сабит ҡыҙы, 1927 й., 5 класс белемле, 1942 йылдан келәтсе.

6. Ҡинйәбулатова Хәтимә Ғәйнетдин ҡыҙы, 1925 й., 7 класс белемле, 1942 йылдан иҫәпсе (учетчик).

7. Ҡаҙбулатов Әхмәтғәлим Малик улы, 1905 й., бригадир.

Бөтәһе лә партияһыҙ.

1941 й. августа Күгәрсен ауыл советына эвакуацияға килгән 150 баланы урынлаштыралар. Районда улар һаны 2500-гә етә. Һарыҡташҡа барып, 563 ғаиләне ҡаршы алалар һәм ауылдарға тараталар. Уларҙың күбеһе йәһүдтәр.

“...19 июля 1942 г. бюро райкома рассмотрело партийное дело Кравцова И.И., 1905 г. рождения, украинец. Прибыл в Зианчуринский район 6 августа 1941 г., работал колхозником в колхозе “Луч” до марта 1942 г. Затем был вызван в ЦК ВКП(б), где проходил специальные курсы и направлен в распоряжение ЦК КП(б) Украины. Ему было предложено пойти на работу в тыл противника, но он отказался — об этом есть сообщение ЦК КП (б) Украины, и он откомандирован в распоряжение Зианчуринского РК ВКП(б). Как трус, Кравцов исключен из рядов партии...”

1942 й. 1 июленә яуаплы хеҙмәттәгеләр исемлеге:

1. Ишмөхәмәтов Ғәлимйән Сәләхетдин улы, 1895 й., колхоз рәйесе,

2. Ҡинйәбулатов Ғәләүетдин Сабит улы, 1877 й., ферма мөдире,

3. Баһауетдинова Гөльямал Шәйхетдин ҡыҙы, 1906 й., ферма мөдире,

4. Тусалин (Дусалин) Бикмөхәмәт Маһиян улы, 1884 й., бригадир,

5. Ҡинйәбулатова Ғәлимә Сабит ҡыҙы, 1927 й., келәтсе,

6. Ҡинйәбулатова Хәтимә Ғәйнетдин ҡыҙы, 1925 й., иҫәпсе.

Бөтәһе лә партияһыҙ.

Район буйынса фронтҡа 7900 кеше китә, шуларҙан 5167 кеше һәләк була, йәғни 2/3 өлөшө — 65%-ы ҡайта алмай. Күрше өлкәләрҙәге ауылдарҙан һуғышҡа киткәндәрҙең 25—30%-ы һәләк була.

Башҡортостан ауылдарынан һәләк булыусылар һаны күп. 1988 й. район сығарған белешмәлә һуғыш яланынан дүрт кешенең береһе генә ҡайтыуы күрһәтелә. Ҡинйәбулат ауылында һәләк булғандар хөрмәтенә һәйкәл ҡуйыуҙы ойоштороусы — райкомда бүлек мөдире вазифаһын үтәгән, һуғышта ҡатнашҡан, ошо ауылдан сыҡҡан Абдрахманов Сиражетдин Нәбиулла улы.

Һуғышта ҡатнаштылар:

1. Ҡинйәбулатов Вәлетдин Илһаметдин улы, 1913—2004,

2. Ҡинйәбулатов Хәмзә Искәндәр улы, 1922—1941,

3. Ҡинйәбулатов Әхмәтсафа Искәндәр улы, 1918,
4. Ҡинйәбулатов Мостафа Искәндәр улы, 1921,
5. Ҡинйәбулатов Нурислам Ғайса улы, 1914—1941,
6. Ҡинйәбулатов Әбсәләм Ғайса улы, 1918,
7. Ҡинйәбулатов Абдулхак Ибраһим улы, 1920,
8. Ҡинйәбулатов Бәҙретдин Ибраһим улы, 1914—1945,
9. Ҡинйәбулатов Фәтхрахман Ибраһим улы, 1908—1942,
10. Ҡинйәбулатов Сабит Әбделғәлләм улы, 1892—1944,
11. Ҡинйәбулатов Миңлеғәли Сабит улы, 1916 (капитан),
12. Ҡинйәбулатов Әхмәтсәғит Әбделғәлләм улы, 1902,
13. Ҡинйәбулатов Фәттәхетдин Ғәйнетдин улы, 1922—1942,
14. Ҡинйәбулатов Зәйнетдин Фазлетдин улы, 1918—1943,
15. Ҡинйәбулатов Әхмәтсәлим Әхмәтғәлим улы, 1911,
16. Ҡинйәбулатов Баһауетдин Ғәләүетдин улы,
17. Ҡинйәбулатов Фәйзрахман Абдрахман улы,
18. Ҡинйәбулатов Әхмәтсәлим Исмәғил улы, 1911—1940 (фин һуғышында),
19. Ҡинйәбулатов Шәкурулла Әхмәтғәлим улы, 1916,
20. Ҡинйәбулатов Әхмәтғәриф Искәндәр улы, 1907,
21. Ҡинйәбулатов Зәкәрия Хәсән улы, 1923,
22. Ҡинйәбулатов Әхмәтғәлим Исмәғил улы, 1905,
23. Ҡинйәбулатов Хөсәйен Искәндәр улы,
24. Ҡаҙбулатов Әхмәтғәлим Малик улы, 1905—1942,
25. Ҡаҙбулатов Әхмәтсәғит Малик улы, 1923,
26. Ҡаҙбулатов Әхмәтйәмил Малик улы, 1910,
27. Ҡаҙбулатов Әхмәтғәли Малик улы,
28. Ҡаҙбулатов Абдулла Сәйфулла улы, һуғыштан ҡайтып үлде,
29. Ҡаҙбулатов Фәрит Сәйфулла улы, 1926 (инвалид),
30. Абдрахманов Сиражетдин Нәбиулла улы,
31. Абдрахманов Минһаж Атаулла улы,
32. Баһауетдинов Хәйретдин Ғәләүетдин улы,
33. Исхаков Ғәзизйән (Ғәзйән) Суфиян улы, 1915,
34. Тусалин (Дусалин) Мырҙамөхәмәт Маһиян улы, 1890,
35. Тусалин Ҡорбанғол Бикмөхәмәт улы,
36. Фәтҡуллин Лотфулла Абзал улы,
37. Ғәзизов Ғәйнетдин Ғәләүетдин улы,
38. Ҡаһарманов Дәүләтбай.

Был тулы булмаған исемлекте, моғайын, ауыл тарихын ныҡлап өйрәнгәндәр тултырырҙар, төҙәтерҙәр тигән теләктәбеҙ.

1930 йылғы Маликов Фәхрислам Әғзам улы һөйләй: “Һуғыш ваҡытында һабанда йөрөнөм, таң менән сығып китә инек. Дүрт ат егеп ер һөрҙөк, мин ат ҡыуҙым. Көнөнә 1—1,1 га һөрә инек, ә норма 0,8 га. Ҡараңғыла һарайҙан ат алып, 3—4 сәғәт эшләгәс, ашҡа ҡайтабыҙ. Көпшәнән һөтлө аш бешерәләр. 1—2 ҡатын бәпкә көпшәһе йыя ине. Ашағас, тағы эшкә, киске сәғәт унға тиклем эшләнек. Һабан бер төрәнле булды. Тырматҡас, ат сәскесе менән сәстеләр. Башта ҡул менән дә сәстеләр. Ат сәскесенә лә ҡушлатып дүрт ат ектек.

Иген өлгөргәс, лобогрейка менән саптыҡ — ул йыйып бара ла, бер көлтә булғас, төшөрөп ҡалдыраһың. Ҡатындар көлтә бәйләй. Беҙҙең колхозда лобогрейкалар өсәү була торғайны.

Көҙ көндәре Ризуан менән, үгеҙ егеп, көлтәләрҙе бер эҫкерткә өйҙөк. Ҡаратал менән Бәшир яланындағы көлтәләрҙе бер урынға йыябыҙ. Молотилка менән иген һуҡтылар. Ҡыш көндәре бер баҫыуҙан икенсеһенә шул молотилканы 12 ат һөйрәй, тәүҙә ҡарҙы көрәйбеҙ, юл һалабыҙ.

Ул ауыр заманалар ҙа үтте. Хәҙер рәхәт тормош кисерәбеҙ".

1942 й. 13 авгусында эш ваҡыты буйынса райком ҡарар итә: "Иртәнге сәғәт 4-тә торорға. Эште сәғәт 5-тән башларға. Иртәнге сәй 9-ҙа, төшкө аш 4-тә. Ҡараңғы төшкәнсе эшләргә. Ашау ҡырҙа. Көлтә бәйләргә һәм 4—5 көндә эҫкертләргә. Һәр төрлө мөлкәтте тейешенсә баһаларға һәм һаҡларға, ә юғалһа — ғәйепленән 5 тапҡыр арттырып түләтергә. Аттарҙы һәм үгеҙҙәрҙе дөрөҫ ҡарауҙы ойошторорға, ышаныслы ҡарауылсыларҙы тәғәйенләргә һәм уларҙы көн һайын төнгө сәғәт 2—3-тә тикшерергә..." Ышаныслы булғас, ниңә тикшерергә?!

Колхоздар Оборона фонды һәм һуғыштан зыян күргәндәр өсөн пландан тыш иген сәсергә йөкләмә ала. Райондағы 343 коммунистан 240 кеше фронтҡа китә.

Һуғыш алдынан районда 37 тәүге партия ойошмаһы эшләй. 1941 й. аҙағына улар һаны 24-кә тиклем кәмей. Байыш һәм Үтәғол ауыл советтарындағы тәүге партия ойошмалары бергә ҡушыла. Күгәрсен һәм Байдәүләт ауыл советтарында партия ойошмалары йыйылыштары бергә үтә. 1942 й. башында улар райкомдан хат ала: "...Имеют место случаи укрывательства от мобилизации военнообязанных и призывников. Без разрешения военкомата некоторые уезжают в длительные командировки и несвоевременно встают и снимаются с учета или опаздывают в военкомат. Укрывающиеся от призыва и мобилизации лица предаются военному трибуналу..." Әммә ундай хәл-ваҡиға беҙҙең яҡтарҙа архив документтарында теркәлмәгән.

Һуғыш башланыу менән райкомдың да хәле мөшкөлләнә. М-1 һәм ГАЗ-А маркалы ике машинаһы, запчасть булмау сәбәпле, йөрөмәй. 16 мең һумға өс ат, берәр мең һумға ике тарантас, 500-әр һумға ике сана һәм шул уҡ хаҡҡа ике сбруй һатып алырға мәжбүр булалар.

Райондың биш йөк машинаһы, бер литр ҙа яғыулыҡ булмау сәбәпле, эшләмәй. Шуға күрә барлыҡ тракторҙар газогенераторға — утын яғып эшләүгә күсерелә. Уларға утын әҙерләү үҙе ҙур мәшәҡәт, эшкә һәләтле колхозсыларҙы төп хеҙмәттән айыра. Имән ағасын ун сантиметр оҙонлоғонда бысып, түмәрсәләргә ярып киптерергә кәрәк — шунан һуң ғына ул яғыулыҡ була. Түмәрсәләр әҙерләүҙе колхоздарға йөкмәтәләр. Кинйәбулаттар үҙ ваҡытында шул "чурка"ларҙы әҙерләмәгән өсөн, етәкселәренә шелтә бирелә.

Һуғыш ваҡытында бөтә эште үҫмерҙәр һәм ҡатын-ҡыҙ алып бара. Күпселеге ат, үгеҙҙәр менән ер эшкәртәләр. Көҙөн-ҡышын молотилкала ашлыҡ һуҡтылар, бесән әҙерләнеләр, урман ҡырҡтылар, ағас ағыҙҙылар, иген ташынылар, мал ҡаранылар. Ашау наҡыҫ, кейем йоҡа, ләкин "Бөтәһе лә фронт өсөн, бөтәһе лә еңеү өсөн!" тип тырыштылар. Шул уҡ ваҡытта ҡатын-ҡыҙҙар хәстәрле әсәләр бурысын үтәне. Кинйәбулаттан Бибикамал Мостафа ҡыҙы алты бала менән ҡала. Бикбирҙенән Ҡәҙерғолова Мәфтүхә биш бала тәрбиәләй. Бикбау ауылынан Зөлҡағиҙә Ильясова бер үҙе дүрт бала тәрбиәләй, ҙурыһына 7 йәш.

“Уларға ашарға берәй нәмә, һыу ҡалдырам да, ишекте бикләп китәм, үҙем көнө буйы эштә. Иң ауыр ваҡыт һуғыш аҙағына тура килде. Аттар бөтә яҙҙы, үгеҙҙәр ҙә тамам ябыҡты, хәлһеҙләнде, ҡарауы аяныс, ә шулай ҙа егәһең, ҡамсылап ҡыуаһың, башҡаса хәлең юҡ. Ҡул менән тырматып, ҡул менән сәсергә тура килде. Барыһына ла түҙҙек, еңелерәк булырына ышандыҡ!” — тип һөйләй ул. Шул уҡ хәлдә Ҡинйәбулаттар ҙа һөйләй.

Ә Зөлҡафиҙә апай таҡмаҡтар, шиғырҙар сығарыуға ла оҫта була. Уның ижады кешеләрҙең күңелен күтәргән, эшкә дәрт өҫтәгән. Бына бер шиғыры:

...Һуғыш йылдарында, колхоз ҡырҙарында
Йүгереп йөрөп эштәр эшләнек.
Ас та булдыҡ, ҡайсаҡ — ялангас та,
Ҡолхоз ташлап ситкә китмәнек.
Үгеҙ егеп, ҡырҙа һабан һөрҙөк,
Һыйыр егеп, тырма тырматтыҡ.
Әҙәм күрмәҫ нужаларҙы күрҙек,
Ә дошманды барыбер ҡыйраттыҡ.

Ҡинйәбулаттар 1941 һәм 1942 йылдарҙа фронт өсөн йылы кейем һәм кәрәк-яраҡтар йыя. 1943 й. октябрендә улар дүрт тун, ун пар быйма, бик күп бейәләй, ойоҡ, ҡалын салбар, бүрек, 15 пар эске күлдәк-ыштан, төрлө таҫтамал, ҡулъяулыҡтар йыйып, фронтҡа оҙата.

Һуғышта дошманды еңеп, ут-һыуҙар кисеп ҡайтҡан һалдаттар һәм офицерҙар ауылда бөлгөнлөккә төшкән хужалыҡтарын аяҡҡа баҫтырырға тырыша. 1946—1947 йылдарҙағы ҡоролоҡ кешеләрҙең көнкүрешен тағы ауырлаштыра. Һуғыш ваҡытында халыҡтың һәм колхоздың малы, бигерәк тә аттар һаны һәм баҫыу күләме кәмей. Ер эшкәртергә техника юҡ, бөтә көс аттарға төшә. Үгеҙ, хатта һыйыр егеп, ер һөрәләр, тырматалар. Иген сәскесте дүрт ат һөйрәй, сәскес етмәһә, ҡул менән һибеп сәсәләр.

1946 й. ғинуарында Обком ҡарар сығара: “...Покончить с недооценкой использования КРС на полевых работах и принять меры, чтобы в течение зимнего периода подготовить коров колхозов и коров колхозников к полевым работам”. Яҙғыһын, һуғыш ваҡытындағы кеүек, һыйыр егеп ер һөрәләр, Һарыҡташтан орлоҡ, ҡатнаш аҙыҡ, ашлама, техника ташыйҙар. Ҡөҙгөһөн шул уҡ юлдан ирегә 10—15 арбанан торған каруан станцияға иген ташый. Һуғыш ваҡытында ауыл хужалығындағы бөтә эште үгеҙҙәр һәм халыҡтың һыйыр малы башҡарҙы, тигән фекер дөрөҫ, сөнки районда 1940 й. 2800 баш ат булһа, 1946 й. 950-гә ҡала. Эре мөгөҙлө мал 2700-ҙән 2100-гә тиклем кәмей. Үгеҙ көсөн 50-се йылдарҙың аҙағына тиклем файҙаланалар, һуңынан улар рентабелһеҙ булып сыға.

Таҙлар ауылындағы Һүрәм һәм Абзан МТС-тарындағы автомобилдәрҙе һәм гусеницалы тракторҙарҙы һуғышҡа ебәрәләр. Ҙур тимер тәгәрмәсле “Фордзон”, “Ҡатерпиллер” тракторҙары иҫкергән, запчасть юҡ, улар менән юл йөрөүе ышанысһыҙ. Ундай тракторҙар районда 1954—1955 й. тиклем эшләне. Бензин, солярка урынына ҡаты яғыулыҡ — утын менән эшләгән техниканы ла шул замандарға тиклем файҙаландылар.

1945 й. 13 декабрендә Күгәрсен ауыл советының ябыҡ партия йыйылышында 6 партия ағзаһы, 5 кандидат, райком уполномоченныйы Соловьев Н.А., РВҠ вәкиле Мөхәмәтйәнов ҡатнаша. Йыйылыш ҡарарынан:

“...Туймакаева Магуза имеет трех малолетних детей. Муж Минигали в дни войны три года работал председателем колхоза и умер. Сын Миниахмет, офицер, погиб на Сталинградском фронте. Сын Шакирулла четыре раза награжден в армии, сын Минимулла инвалид войны. Она работала в колхозе. Квартира и подворные постройки не отремонтированы, дров не имеют, скошенное летом сено — семь копен — осталось в поле. Ей не выделялись подводы, и она с салазкой ходила за дровами. 9 декабря 1945 г. нагрузила дров на салазки и при спуске с горы осталась под салазками и получила тяжелое ранение, сильное кровотечение. Мед. помощь ей оказалась недостаточной. Трое малолетних детей и сама больная лежали без продуктов, корова была под открытом небом, корма нет.

Демобилизованный Туймакаев Минимулла лежит 20 дней. Из-за непосильного труда открылась рана. Ехать в больницу не может, т.к. обувь не может обувать, у жены грудной ребенок и она летом не смогла заготовить сена и дров. Продуктов, кроме картофеля, нет, правление колхоза помощи не оказало, в семье 6 душ.

Бывшие председатели колхоза Хакимов Салих, Тухфатуллин Усман, Туймакаев Минимулла вместо помощи председателю колхоза Кинзябулатову агитируют людей не работать в колхозе, так как пользы мало.

Собрание решило: Председателю колхоза Кинзябулатову объявить выговор с занесением в личное дело. Секретаря парторганизации Кулуева и председателя сельсовета Абдульменева предупредить”.

1950 йылдан колхозға тракторҙар килә башлай. Ҙур тимер тәгәрмәслеләрҙе һәм утын яғып эшләтә торғандарын тәүҙә ҡайтаралар. 1951 й. колхоз эреләтелгәс, гусеницалы тракторҙар бирәләр, бушлай түгел, әлбиттә. Тракторҙа прицепщиктары һабанда саң йотоп, төрәндәрҙе кәрәкле тәрәнлеккә йә күтәреп, йә төшөрөп һөрҙөрә. Йөрөтөүсеһе кабинаһыҙ тракторҙа көнө-төнө ҡар ҡатыш ямғырҙа, ҡыҙыу ҡояш аҫтында, туҙанда эшләй.

Сталин исемендәге колхозда 1951 й. Ҡинйәбулаттан тракторсылар, прицепщиктар, көйләүселәр (ремонт эштәрен башҡарыусылар) эшләне:

Ҡинйәбулатов Шакирулла Әхмәтғәлим улы, 1916 й, 1950 йылдан тракторсы,
Ҡинйәбулатов Зәйнулла Фәйзулла улы, 1929 йылғы, 1950 йылдан тракторсы,
Ҡинйәбулатов Әхмәтшәриф Ғариф улы, 1927 йылғы, курсант,
Ҡинйәбулатов Ҡәлимулла Фәйзулла улы, 1922 йылғы, курсант,
Тусалин Сөбханғол Бикмөхәмәт улы, 1933 йылғы, курсант,
Абдрахманов Вәлиулла Хәйрулла улы, 1894 йылғы, көйләүсе,
Ҡинйәбулатов Ғәбит Хәлил улы, 1903 йылғы, яғыулыҡ ташыусы,
Ҡинйәбулатов Миңлеямал Фазлетдин улы, 1926 йылғы,
Байчурина Зәбирә Ғәбит ҡыҙы, 1899 йылғы, ашнаҡсы,
Абдрахманов Хөрмәт Шәрәфетдин улы, 1924 йылғы, тракторсы,
Абдрахманов Шәйхетдин Шәрәфетдин улы, 1914 йылғы, курсант,
Абдрахманов Зәбих Зәйнулла улы, 1906 йылғы, яғыулыҡ ташыусы.

1951 й. Һүрәм МТС-ы колхоздың 300 гектарҙағы игенен йыйырға була, ә иген 1960 гектар ерҙә сәселгән. Тимәк, ҡалған 1660 га ашлыҡты колхоз үҙе мал егеп, ябай сапҡыс файҙаланып, көлтә бәйләп йыйырға тейеш. Исмаһам, бер мең гектарҙан урожай йыйырға ярҙам итһәләр ине, тип зарлана колхоз рәйесе Хәлитов.

Һуғыштан һуңғы йылдарҙа район етәкселеге, колхоздар ит тапшырыу планын йәһәтерәк үтәһен өсөн, башҡорт ауылдарында ла сусҡасылыҡты үҫтерергә ҡуша, йәнәһе, сусҡалар тиҙ үрсей һәм тиҙ өлгөрә.

Райком колхоздың малсылыҡта эшләгән кешеләре исемлеген һорай. Колхоз идараһы 1950 й. 2 ғинуарында ундай исемлекте төҙөп, райкомдың ауыл хужалығы бүлегендә инструктор булып эшләгән Ҡинйәбулатов Зәкир Ғәлләм улына тапшыра:

“1. Ҡинзябулатов Ахметгариф Искандарович, 1907 г. рождения, член ВКП(б), зав. фермой с 1936 г. Награжден двумя медалями “За отвагу”, орденом “Славы” III степени, II благодарностями от тов. Сталина, Почетной Грамотой за хорошую службу в армии, медалью “За трудовую доблесть”.

2. Ҡазбулатов Хуснутдин Маликович, 1892 г. рожд., беспартийный, старший конюх с 1947 г., награжден медалью “За победу над Германией в Великой Отечественной войне”, почетными грамотами, премией за обеспечение сохранности поголовья скота.

3. Ҡинзябулатов Галяутдин Сабитович, 1877 г. рожд., ветфельдшер с 1934 г., за хорошую работу в 1935 г. премирован пятью метрами мануфактуры, не допустил болезней животных.

4. Байчурина Назифа Хайбулловна, 1922 г. рожд., беспартийная, образование 4 класса, награждена медалью “За трудовую доблесть” за сохранность овец в 1949 г.

5. Ҡазбулатова Фатима, 1914 г. рожд., телятница с 1948 г., награждена медалью “За трудовую доблесть”.

6. Ҡинзябулатова Галима Ҡагармановна, 1913 г. рожд., телятница с 1949 г., награждена медалью “За трудовую доблесть”.

7. Ҡинзябулатова Фахрниса Гарифовна, 1931 г. рожд., овцевод.

8. Исхакова Фарида, 1931 г. рожд., овцевод.

9. Ҡинзябулатова Рахима Искандаровна, 1931 г. рожд., свинарка.

10. Ҡинзябулатова Махмуза Абдулгалимовна, 1912 г. рожд., конюх с 1949 г., награждена медалью “За трудовую доблесть”.

11. Фаткуллина Зарифа Абзаловна, 1912 г. рожд., воловница, награждена медалью “За трудовую доблесть”.

1949 й. октябрендә ауылдан райкомға килгән шикәйәткә һылтанып, колхоз идараһының эшен тикшерергә булалар. Төҙөлгән акт буйынса ферма мөдире Ҡинйәбулатов Ғ. дәүләткә 31 кг һары майҙы һәм 26 кг иретелгән майҙы тапшырмаған өсөн унан колхозға бер генә һарыҡ ҡабул ителгән. Ҡемдең ҡулында — шуның ауыҙында, тигәндәй, колхоз етәкселәре 16 баш эре мөгөҙлө малды 16 баш һарыҡҡа алыштыра. Әлбиттә, алыштырыусылар файҙаһына, йәғни ветфельдшер Ғ.Ҡинйәбулатов, лесник А.Маликов, бригадир М.Маликов берәр һарыҡты берәр башмаҡҡа алыштыралар. Тағы берәү, биш тауыҡ биреп, бер сусҡа балаһы ала. Актта яҙылғанса, “...обмен произведен без разрешения райкома партии и санкции общего собрания колхозного актива. В декадный срок взыскать натурой стоимости скота или продуктов с виновников, указанных в акте проверки. Оживить деятельность ревкома колхоза, упорядочить учет и контроль. Посеять кормые культуры на 22 га. Принять меры к выполнению плана развития общественного животноводства и сдачи продуктов государству”.

1950 йылдың йәйенән районда колхоздарҙы эреләтеү башлана. 37 колхоздың 25-ен ҡушырға ҡарар итәләр. Ә ҡалған 12-һе эрерәк була. Шул 25 колхоздан 12 колхоз төҙөлә һәм районда һуңынан 24 колхоз була. Июль аҙағына 16 колхоз берләшеп, 8 колхоз төҙөлә.

24 июндә Сталин исемендәге һәм “Ҡыҙыл Ямашлы” колхоздарының дөйөм йыйылышы саҡырыла һәм берләшергә ҡарар итәләр. Күгәрсендә 162 хужалыҡта 655 кеше, Ямашлыла 40 хужалыҡта 146 кеше көн итә. Эшкә һәләтлеләр 255 һәм 50 кеше, колхоздарҙа аттар 77 һәм 8 баш, эре мал 177 һәм 79 баш. Колхозсыларҙың эре малы 190 һәм 55, ваҡ мал 277 һәм 137 баш, ер 2820 һәм 2176 гектар, һөрөнтө ер 871 һәм 482 гектар. Күгәрсендәрҙең ере ямашлыларҙыҡына ҡарағанда, һәр бер хужалыҡҡа бүлгәс, бик аҙ килеп сыға, сөнки улар XIX быуаттың 40-сы йылдарында ғына ситтән килеп ултыра һәм, башҡорт булып яҙылып, бушлай ер ала, ә 1917 йылда аҫабалыҡ хоҡуғы бөтөрөлгәс, татар булып китә. Хоҙайбәндә, Ҡинйәбулат, Ибрай, Байдәүләт, Таҙлар һ.б. ауыл кешеләре борондан үҙ аҫаба ерендә йәшәй.

Колхоз рәйесе итеп Хәлитов Шарифулла Ислам улы һайлана. Уға тиклем дә шунда рәйес вазифаһын башҡара. 1 октябрҙә хужалыҡҡа “Герой Труда” колхозы ҡушыла.

Башта “Октябрҙең 20 йыллығы”, К.Маркс, Ленин исемендәге колхоздарҙы берләштерергә уйлайҙар һәм һәр колхоздың күрһәткестәрен байҡап сығалар. 1950 й. 1 октябренә Ҡинйәбулат ауылының хәле шундай була: 42 хужалыҡ, 158 кеше, шуларҙан 55 кеше эшкә һәләтле. Аттар һаны 36, эш аттары 19, үгеҙҙәр 13 баш. Эре мөгөҙлө мал 81 баш, шуларҙан һыйырҙар — 13, һарыҡ-кәзә 152 баш, сусҡа — 55, ҡош — 107.

Һөрөнтө ер 422 га, сабынлыҡ — 108, көтөүлек — 535 һәм бөтә ер 1184 га.

1950 й. 19 октябрендә колхозсылар йыйылышҡа саҡырыла, унда 52 кеше ҡатнаша. Малдарҙы ҡышлатыу мәсьәләһе ҡарала. Ферма мөдире Ҡинйәбулатов Ғәриф: “Колхозда ни бары алты тауыҡ йомортҡа баҫты, һәм хәҙер тауыҡ һаны бик аҙ. Һәр бер хужалыҡтан кәмендә 2 баш тауыҡ контрактовать итергә (игенгә алыштырырға)”, — ти.

Беренсе ҡарар — йыйылыш тауыҡтарҙы халыҡтан бушлай йыйырға тәҡдим итә.

Икенсе ҡарар — фермалағы ата ҡаҙҙарҙы халыҡтағы инә ҡаҙҙарға алыштырырға.

3. Мал торлаҡтарын 1 ноябргә тулыһынса ремонтлап бөтөргә.

4. Төҙөлөш бригадаһын Ҡинйәбулатовҡа йөкмәтергә.

5. Малсылыҡ продукттарын дәүләткә 5 ноябргә тапшырып бөтөргә.

6. Сусҡа малдарын юғалтыуһыҙ ҡараған Абдрахманова Сафияға, дүрт инә сусҡанан 53 бала үҫтергән өсөн, ике сусҡа балаһы бирергә.

7. Ер һөрөүҙе 5 ноябргә тамамларға. Бының өсөн ике һабан сығарырға һәм тракторҙы тулыһынса файҙаланырға — эште Маликовҡа йөкмәтергә.

8. Ағас ҡырҡыу һәм ташыу планын 1 ноябргә үтәргә. Эште Тусалин Аллағолға, Рәхимә, Миңлеямал һәм Мәһира Ҡинйәбулатоваларға йөкмәтергә.

Райком Пленумында йә бюрола райондағы колхоз, совхоз, предприятиелар эшен 4—5 йыл һайын бер мәсьәлә буйынса йә һәр яҡтан тикшереп сығалар ҙа ҡарар ҡабул итәләр. Колхоз дәүләткә иген тапшырыу планын үтәгәс, орлоҡ һалынғас ҡына райком ҡушыуы буйынса ҡалған игенде колхозсыларға таратырға мөмкин. Әгәр ҙә колхоз етәкселеге был мәсьәләлә аҙыраҡ миһырбанлыҡ күрһәтһә, ас халыҡҡа алданыраҡ арыш йә бойҙай бирһә, ундайҙарҙы икенсе һылтау менән, төрлө сәбәп табып, һәр яҡтан тикшереп, шелтә бирәләр, эшенән бушаталар, хөкөмгә тарттыралар.

1948 й. 13 сентябрендә райкомдың бюро ултырышында ауыл партия ойошмаһының эшен тикшерәләр. Информацияны партком секретаре Ҡинйәбулатов бирә. Һуңынан бюро һығымта яһай: колхоздың партия ойошмаһы урып-йыйыу һәм дәүләткә иген тапшырыу ваҡытында коммунистар һәм партияһыҙҙар активы менән етерлек кимәлдә эшләмәне, йыйылыштар әҙерлекһеҙ уҙғарыла, тәнҡит большевиктарса булманы, коммунистарҙың уҡыуы насар бара, гәзит-журнал алдырмайҙар, стена гәзите юҡ, социалистик ярыш ойошторолмай, партком секретаре Ҡинйәбулатов комсомол ойошмаһының эше менән ҡыҙыҡһынмай, ярҙам күрһәтмәй һ.б.

Колхоз рәйесе Ҡинйәбулатов, ауыл хужалығы артеленең уставын боҙоп, йыйылыш ҡарарынан башҡа колхозда ағза булмаған үҙенең туғандарына һәм эшнәләренә бесәнлек бүлеп бирә.

Ошоларға нигеҙләнеп, бюро ҡарар итә:

“1. Указать секретарю парторганизации тов. Ҡинзябулатову на допущенный самотек в работе и потребовать от него в ближайшее время улучшить партийно-политическую и организационную работу.

2. Обязать тов. Ҡинзябулатова в дальнейшем регулярно, с хорошей подготовкой проводить партийные собрания с обсуждением наиболее насущных производственных и партийно-полтитических вопросов, смело развертывать критику и самокритику, вскрывая недостатки в работе правления колхоза, парторганизации и отдельных коммунистов.

3. Практиковать на партийных собраниях обсуждение отчетов отдельных коммунистов.

4. Усилить агитмассовую работу среди населения.

5. Наладить политическую учебу среди коммунистов.

6. Ҡоренным образом перестроить стиль руководства комсомольской организацией.

7. Данное решение обсудить на партийном собрании и принять необходимые меры к его выполнению.

8. О выполнении данного решения доложить 1 октября 1948 г. райкому ВҠП(б)”.

Район активы һәр йыл колхоздарҙың яҙғы сәсеүгә әҙерлеген тикшереү өсөн ауылдарға юллана. Уполномоченныйҙарға “памятка” төҙөлә: яҙғы сәсеү буйынса Мәскәү күрһәтмәләрен өйрәнеү, агитаторҙар эшен ойоштороу, партия ойошмаһының, колхоздың планын, сметаһын төҙөргә ярҙам итеү, һәр колхозсы гәзит алдырамы-юҡмы һ.б. Күп осраҡта шул ауыл советынан, йә шул ауылдан сыҡҡан һәм район үҙәгендә эшләгән кешеләрҙе ебәрәләр. Ҡинйәбулатҡа райкомда инструктор вазифаһын башҡарыусы, ошо ауылдан сыҡҡан С.Н.Абдрахманов килә. Уның 1950 й. 6 апрелендә яҙған отчетынан өҙөк:

“1. а) колхоз не приступил к задержанию талых вод,

б) не начато сухое протравление семян ранних зерновых,

в) прицепной инвентарь и вагончики для трактористов накануне завершения,

г) не закончена ручная очистка овса.

2. По животноводству: в 1949 г. колхоз не заложил силоса, и поэтому скот не получает полноценного корма.

3. Проведено открытое партийно-комсомольское собрание, где проработано Постановление СМ СССР и ЦҠ ВҠП(б) о ходе подготовки к весеннему севу и о

ходе выполнения трехлетнего плана развития общественного животноводства. Намечены практические меры по выполнению данного Постановления.

4. Было проведено общее собрание членов колхоза, где обсуждались план и смета колхоза и весеннего сева. Не хватает семян гороха, льна, картофеля. За семенами овса отправились 14 подвод в Саракташ, но привезли зараженные семена.

5. Кормов для скота достаточно, но план первого квартала по сдаче государству мяса, молока, масла не выполнен.

Состояние тягловой силы средней упитанности. Весенний сев колхоз намерен завершить за 13 рабочих дней".

Күрәһең, 1950 й. яҙ иртә килгәндер. Колхоз етәкселәре 28 апрелдә үк сәсеүҙе нигеҙҙә тамамлау хаҡында райкомға һәм райсоветҡа хәбәр итә:

"1. Забороновано 244 га, в т.ч. тракторами 180 га.

2. Посеяно 240 га, в т.ч. тракторами 198 га: пшеница — 138 га, овес — 67, подсолнух — 30, горох — 5 га.

3. Весновспашка — 2 га.

Отличились: пред. колхоза Кинзябулатов В.И., секретарь парт.организации Байчурин А.А., бригадир полеводческой бригады Маликов Мифтах Шамсетдинович, возчик горючего Кинзябулатов Габид Х., трактористы Маликов Ф.А., Кутиргин И., сеялщики Абдрахманов Валиулла Хайруллович, Фаткуллин Гилаз, Кинзябулатов Ахмет, бороновщики Тусалина Гилмикамал М., Абдрахманова Бибизият Г., комсорг Кинзябулатова Умикамал, Кинзябулатовы Уркия Ибрагимовна, Рахима Искандаровна, Галима, Казбулатова Фатима, ст. конюх Кинзябулатов Хуснутдин Абдулмаликович".

50-се йылдар аҙағында Мәскәү етәкселеге сусҡасылыҡҡа етди ҡарарға ҡуша. Кинйәбулат ауылы һәм Сталин исемендәге колхоз урманға, көтөүлек һәм сабынлыҡтарға бай. Тәбиғи шарттарҙың ошолай уңайлы булыуы малсылыҡ үҫтереүгә күп мөмкинлектәр аса. Шулай ҙа колхоз был тәңгәлдә бер урында тапана, ит етештереү айырыуса түбән, бигерәк тә сусҡасылыҡта. 1958 й. оло инә сусҡаларҙан дүртәр генә үрсем алынған. Күрәһең, ата-бабаларҙың ҡатыморонға булған ҡарашы һәм ислам дине ҡаныбыҙға һеңгән. Колхоз етәкселәре С.Мәсәғәтов һәм Ф.Бикташев сусҡасылыҡҡа әһәмиәт бирмәүе, малсыларҙың шул ҡылтүбәгә ерәнеп ҡарауы арҡаһында, ул хайуан етерлек үрсемәй. Хужалыҡта сусҡаларҙы көтөүҙә йөрөтөп һимертеүҙе йәйгә сыҡҡас та ойоштормайҙар. Һимертелә торған 24 сусҡа тар, бысраҡ ҡурала аҫырала, ә башҡалары теләһә ҡайҙа йөрөй. Колхоздың ике һөтсөлөк фермаһы яҡын булһа ла, сусҡа балаларына айыртылған һөт барып етмәй, сөнки хужалыҡ етәкселәре әйтеүҙәренсә, Оло Һүрәм йылғаһы аша ваҡытлыса сыға алмағандар, тип яҙа "Совет Башҡортостаны" гәзите 1959 й. 24 июнендә.

1960 й. алты ауылды берләштергән колхозда биш башланғыс, бер урта мәктәп, элемтә бүлексәһе, ауыл советы, сельпо, медпункт, китапхана була. Ауылдарҙа тиҫтәләгән юғары һәм махсус урта белемле кеше эшләй, ләкин уларҙың күбеһе халыҡ араһында аңлатыу эштәре алып барыуҙа ҡатнашмай, тип уйлай район етәкселеге.

Ямашлы ауылындағы һарыҡсылыҡ фермаһы малсылары гел йәштәрҙән тора. Улар һәр йөҙ һарыҡтан 114—115 бәрәс алып үҫтереп, һәр һарыҡтан 2—2,5 килограмм йөн ҡырҡып алырға тырыша. Әммә уларға эштән һуң ял итеү өсөн шарттар, радио юҡ, гәзит-журналдар ҙа бик аҙ алдыралар, артистар, агитаторҙар килмәй. Гармун уйнап, урам буйлап йырлап йә күперҙә бейеп күңел асырға ҡала.

Ҡүгәрсен ауылының агитация һәм пропаганда төркөмө етәксеһе А.Якупов һүлпән эшләй икән. Ғинуар айында бында ни бары 7 лекция үткәрелә, уның да икеһен район үҙәгенән килгәндәр уҡыған. Йыш ҡына лекцияларҙы ҡоро тел менән, стандарт һәм дөйөм характерҙа һөйләйҙәр. Уларҙа колхоз алдында торған бурыстар, ирешелгән уңыштар, проблемалар ситләтеп үтелә, урындағы факттар аҙ сағыла. Башҡорт, татар ауылдарында лекция, докладтарҙы туған телдә үткәрмәү күренештәре менән дә район етәкселеге ризаһыҙлығын белдерә. Ҡүгәрсенгә Иҫәнғолдан килгән бер әфәнде ауыл хужалығына арналған лекцияһын урыҫса уҡып ҡайтып китә, тип яҙа Өфөлә сыҡҡан гәзит. (22 март, 1960 й. “Совет Башҡортостаны”).

1960 й. 25 авгусында район етәкселәре С.Я.Щербинин һәм З.Я.Ғөмәров республика хужалары З.Н.Нуриевҡа, В.Ғ.Нәбиуллинға һәм мәҙәниәт министры Г.Ш.Вәхитовҡа сираттағы үтенес хаты яҙа:

“...В районном центре не имеется ни районного дома культуры, ни кинотеатра, и культурное обслуживание не отвечает возросшим потребностям населения. Вся культурно-воспитательная работа проводится в приспособленном здании мечети, где нет ни гримерной, ни кабинетов для кружковой работы, ни комнат для занятий с участниками художественной самодеятельности. Зрительный зал очень маленький, вмещает только 160 человек, где даже невозможно провести массовые мероприятия.

Убедительно просим Вас на 1961 г. включить в народно-хозяйственный план строительство типового здания Дома культуры со зрительным залом на 350—400 мест и поручить тресту “Башстрой”, который в настоящее время у нас ведет строительство типового здания Исянгуловской средней школы. В 1961 г. строительство школы завершается”.

Әммә ул замандарҙа Мәскәү түрәләре сираттағы донъя һуғышына әҙерләнгәс, периферияларғы мәҙәниәткә, һаулыҡ һаҡлауға, көнкүрешкә аҡса бүлеүҙе йыл һайын кәметте. Икенсенән, республика етәкселеге күберәк көнбайыш диалектта һөйләшкән райондарҙан булғас, һәр ваҡыт, 90-сы йылдарҙың башына тиклем беренсе нәүбәттә көнбайыш райондарҙы үҫтереү, шунда яңы предприятиелар төҙөү, юл һалыу, мәҙәниәтте үҫтереү яғын ҡараны, ә көньяҡ, Урал аръяғы райондары ситләтелде. Р.Ҡ.Ибраһимов, Ф.В.Солтанов кеүектәр үҙ районын үҫтереү тураһында һүҙ әйтергә батырлығы етмәй, “милләтсе” мөһөрөнән ҡурҡа, үҙҙәре юғары урында ултырыу менән ҡәнәғәт йәшәй бирә. М.Ғ.Рәхимов заманында көньяҡ һәм көнсығыш райондарға бер аҙ иғтибар бүленде, һуңынан хәл тағы мөшкөлләнде, тигән фекер ҙә бар.

1966 й. февралендә Өфөлә КПСС Өлкә комитетының XXX конференцияһы йыйыла. Райондан алты делегат һайлана, шуларҙың икеһе башҡорт, бере урыҫ һәм өс татар, сөнки беренсе секретарь һәм райисполком рәйесе обком ебәргән татарҙар, ә улар районда 8% ҡына тәшкил итә.

1961 й. көҙө. Сталин исемендәге колхоз уңыш йыйып, дәүләткә иген тапшырыу планын, малсылыҡ буйынса ла бурысын нигеҙҙә үтәү алдында. Бер көндө Ҡүгәрсендә үткән ҙур йыйылышҡа коммунистарҙы, комсомол активистарын, бригадирҙарҙы, уҡытыусыларҙы саҡырҙылар. Иҫәнғолдан килгән, Ҡинйәбулатта тыуып үҫкән С.Н.Абдрахманов Үҙәк Комитеттың ҡарары менән

таныштырҙы. Ул ҡарарҙың асылы — совет кешеләрен идеологик һәм әхлаҡи яҡтан коммунизмға әҙерләү саралары тураһында. Илдә коммунизмдың матди-техник базаһы төҙөлөп килә, әммә кешеләр әҙер түгел, уларҙа шәхси һәм хосуси милекселек тойғоһо көслө әле, сөнки күп ғаиләләр, хатта ҡалала йәшәгәндәре лә кәртәләрендә күпләп мал тота, эштән ҡайтҡас, шул мал менән мәшғүл, гәзит-журнал, китап уҡымай, белем, мәҙәни кимәлен күтәрмәй, йәмғиәт эшендә әүҙем ҡатнашмай һ.б. Күп кешеләрҙең әхлаҡи кимәле лә түбән, урлашыу, мутлашыу, эсеп һуғышыу күренештәре лә кәмемәй — быныһы ла шул шәхси милекселек тойғоһоноң, капитализм ҡалдығының бәғзе берәүҙәрҙә көслө булыуынан килә икән.

Шуның өсөн илдә, бигерәк тә ҡалаларҙа, ҡасабаларҙа, район үҙәктәрендә мал аҫрауҙы тыйырға, ауылдарҙа берәр һыйыр (ул һыйырҙың быҙауҙарын да колхозға тапшырып тороу талап итеЛә) менән ике һарыҡтан артыҡ мал тотмаҫҡа — бына шундай саралар ҡаралғайны был ҡарарҙа. Ҡарарға Н.С.Хрущев ҡул ҡуйған.

Халыҡтың “артыҡ” малын ике-өс айҙа тартып алдылар. Ауыл кешеләре, “Хрущев кәзәне бөтөрҙө”, тип һаман һөйләй. Мал тотоуҙы сикләү өс-дүрт йыл барҙы. Коммунизм төҙөүсе халыҡтың хосуси милекселек тойғоһо кәменеме, әхлаҡи кимәле арттымы — әйтеүе ҡыйын. 1964 й. октябрендә Л.И.Брежнев етәкселегендәге әһелдәр заговор һөҙөмтәһендә Н.С.Хрущевты вазифаһынан бушатҡас, хәл яҡшыра башланы.

Хрущевтың белем даирәһе тар булғас, хаталары быныңменән генә сикләнмәне. Ул аҙағы ни менән бөтөрө ентекләп тикшерелмәгән төрлө реформалар үткәрҙе — райондарҙы эреләтеү (1956 й. Абзан районы Ейәнсура менән ҡушыла), совнархоздар төҙөү, өлкәләр һанын күбәйтеү (Ейәнсура районы Стәрлетамаҡ өлкәһенә ҡараны), климатына ҡарамай, һәр ерҙә кукуруз сәстереү.

Кинйәбулатта ла кукуруз сәсеп ыҙаландылар. Үҫеп сыға ла, 30—40 см. күтәрелеп, ҡата ла ултыра, шунан уны бейек үлән баҫып китә. Йәй йылы, ямғырлы килһә, бер ярым—ике метрға тиклем үҫә ине. Мәҫәлән, Үтәғол, Ҡужанаҡ ауыл советтарында 1955 й. шәп үҫте, колхоздар күп силос һалды, малға ҡыш сығыу еңелерәккә төштө.

Власҡа килгән Л.И.Брежнев, киреһенсә, реформалар үткәреүҙән ҡурҡа. Илдә нефть, газ менән бәйле экономика үҫте, әммә һуңынан “застой” тип аталған идара итеү системаһы 18 йыл буйы (1964—1982) үҙгәрмәне.

Ул йылдарҙа бер туҡтауһыҙ АҠШ-ҡа ҡаршы “һалҡын һуғыш” барҙы, ике яҡ та ҡыҙыу ҡоралланды. Беҙҙең илгә ул бик ҡимmәткә төштө, ә нефть, газ булмаһа, хәл бик мөшкөл ине. Быны нисек СССР-ҙы юҡ итергә, тип баш ватҡан АҠШ стратегтары тиҙ аңлай һәм донъя баҙарында бер баррель (бер мискә самаһы) нефттең хаҡын 40 долларҙан 10 долларға тиклем төшөрөүгә ирешә. Шунан беҙҙең магазиндарҙа тауар кәмей, халыҡ аслы-туҡлы йәшәй, ә былар илдең тарҡалыуын яҡынайта. 2014—2015 йылдарҙағы хәл-ваҡиғалар ҙа шуға оҡшаш.

СССР-ҙың емерелеүендә кем ғәйепле — был АҠШ әһелдәрененң яуызлығымы, әллә үҙебеҙҙең түрәләрҙең уйлап еткермәүендәме? Ике сәбәптең тап килеүе булғандыр. Әммә 1991 й. декабрендә тарҡалған Совет империяһын халыҡ та, 18 миллионлыҡ партия ла, армия ла, депутаттар ҙа яҡламаны. СССР объектив сәбәптәр менән үҙенән-үҙе юҡҡа сыҡты.

## АУЫЛДАРҘА ХУЖАЛЫҠ ҺӘМ КЕШЕЛӘР ҺАНЫ

| Ауылдар | 1816 | 1859 | 1877 | 1901 | 1917 | 1920 | 1926 | 1930 | 1939 | 1959 | 1989 | 2002 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Ҡиняәбулат | – | 24–142 | 27–214 | 28–171 | 44–252 | 46–235 | 32–172 | 42–195 | –218 | –200 | –159 | –175 |
| Урмансы-Ибрай | 30–309 | 78–420 | 99–581 | 30–772 | 49–715 | 130–647 | 97–445 | 112–469 | –558 | –523 | –493 | –524 |
| Бикбау-Аҡҡужа | 18–141 | 53–252 | 40–236 | 62–237 | 80–422 | 70–363 | 40–192 | 55–250 | –284 | –314 | –210 | –256 |
| Сәләймән | – | 18–131 | 14–99 | 24–122 | 40–199 | 37–169 | 30–149 | 36–170 | –181 | –148 | –22 | –15 |
| Байҙәүләт | 25–232 | 76–359 | 60–362 | 85–482 | 116–558 | 97–492 | 68–301 | 83–248 | –476 | –350 | –202 | –231 |
| Үрге Бикбирҙе | 17–189 | 69–551 | 90–567 | 44–686 | 90–471 | 79–328 | 41–195 | 44–201 | –308 | –201 | –213 | –229 |
| Түбәнге Бикбирҙе | | | | | 108–587 | 89–458 | 51–244 | 56–260 | –291 | –322 | –233 | –281 |
| Малай Муйнаҡ | – | 17–91 | 15–81 | 25–120 | 29–154 | 25–124 | 11–50 | 14–69 | –101 | –96 | –82 | –98 |
| Хоҙайбәндә-Аҡҡолдоҙ | – | 23–151 | 39–214 | 47–283 | 71–387 | 56–270 | 47–202 | 58–235 | –336 | –159 | –94 | –105 |
| Ғәббәс | 5–40 | 17–93 | 17–103 | 22–156 | 37–220 | 38–189 | 28–146 | 36–158 | –184 | –132 | –141 | –161 |
| Сәлих-Күгәрсен | – | 33–257 | 50–352 | 86–737 | 142–955 | 154–918 | 139–691 | 146–724 | –930 | –1010 | –835 | –918 |
| Таҙлар | – | 23–180 | 32–136 | 33–184 | 49–278 | 44–226 | 38–172 | 45–210 | –463 | –615 | –1173 | –1109 |
| Иҫәнғол | 35–333 | 115–767 | 90–411 | 100–465 | 112–520 | 110–512 | 61–259 | 66–297 | –2166 | –2349 | –5976 | –7441 |